*Стәрлетамаҡ ҡалаһының 62-се*
*балалар баҡсаһының тәрбиәсеһе*
*Мөхәмәтйәнова Ләйсән Фәнир ҡыҙы*

## Планшет методик ҡулланмаһы аша балаларҙы башҡорт телендә һөйләшергә өйрәтеү

Туған тел аралашыу һәм тирә-яҡ ысынбарлыҡты танып белеү сараһы булараҡ ҡына түгел, ә милли мәҙәни традицияларҙы теркәү, һаҡлау сараһы булараҡ та кәрәк. Шуға күрә балалар баҡсаһында балаларҙы тыуған илгә, уның тәбиғәтенә, халыҡтың үткәненә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү, уларҙы бай ауыҙ-тел ижадына, милли йолаларына һәм мәҙәниәтенә йәлеп итеү бик мөһим. Балалар баҡсаһының бурысы – туған телгә һөйөү тәрбиәләү һәм уны өйрәнеү булып тора.

Кескәйҙәргә башҡорт телен өйрәтеүҙең төп маҡсаты булып уларҙың телде үҙ-ара һәм ололар менән көндәлек йәшәйештә аралаша алыу кимәлендә үҙләштереүе тора. Бала үҙенә ҡарата бирелгән ябай ғына һорауҙы аңлап, уға тулы яуап ҡайтара һәм үҙ уй фекерҙәрен ябай һөйләмдәр менән еткерә алһа-маҡсат тормошҡа ашҡан тип һынарға мөмкин.

Инновацион ҡулламаларҙың береһе, үҙемдең көндәлек эшемдә ҡулланған ҡулланмам – Планшет. Мин башҡорт телендә балаларҙың телмәр үҫтереүен, алдыма ҡуйған бурыстарымды ошо ҡулланмам аша тормошҡа ашырам.

**Планшет ҡулламаһының маҡсаты:** мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың телмәрен үҫтереүҙең традицион булмаған педагогик технологияһын үҙләштереү буйынса педагогтарҙың һөнәри оҫталығын үҫтереү. Балаларҙы башҡорт теленә өйрәткәндә Планшет методик ҡулланмаһының әһәмиәте.

**Ҡулламаның бурыстары:** мәктәпкәсә йәштәге балаларҙа башҡорт халҡының традицияларына, теленә, тарихына хөрмәт тойғоһо тәрбиәләү;

туған телен, мәҙәниәтен ярата һәм үҙ туған телендә һөйләшә белгән шәхес итеп тәрбиәләү; уйын ҡорамалдарын ҡулланыу күнекмәләрен камиллаштырыу.

**Нимә һуң ул планшет?**

Планшет ул уйын әсбапы, һүрәттәр йыйылмаһы менән уйындар өсөн нигеҙ.Планшетка материалдар кеҫәләр ярҙамында еңел ҡуйылып , ҡалыптарға беркетелә, шул уҡ ваҡытта ҡулланманы вертикаль һәм горизонталь рәүештә лә ҡулланырға уңайлы. Федераль дәүләт белем биреү стандарты талаптарына тап килә, сөнки был ҡулланма: күп функциялы, вариатив бай, тиҙ йыйылыусан, ниндәйҙер махсус йәше ҡаралмаған, эстетик күренешкә эйә.

**Планшет ҡулламаның маҡсаты:**

-балаларҙа инновацион ҡулланмаларҙы уртаҡ һәм ирекле эшмәкәрлектә ҡулланыуға ҡыҙыҡһыныу уятыу;

-планшетты ҡулланғанда телмәр һәм күҙ алдына килтереү һәләтен үҫтереү;

- мәктәпкәсә йәштәге балаларҙа тыуған яҡҡа һөйөү тойғоһо тәрбиәләү.

Планшетты балалар баҡсаһынан тыш, башҡа урындарҙа ла ҡулланырға мөмкинлеге бар. Шулай уҡ ата-әсәләр менән берлектә ҡулланыу балаларҙа оло шатлыҡ уята. Мәҫәлән, үтелгән материалды нығытыу, ҡабатлау, ятлау өсөн уңайлы.

**Уйын «Ҡыҙыҡлы өндәр»**

**Максат:** Бирелгән өндәргә дөрөҫ һүрәтте тап; балаларҙың хәтерен, иғтибарын үҫтереү.

Был ҡулланма өҫтәл артында ултырып, яңғыҙ, парлап уйнау өсөн уңайлы. Шулай уҡ ата-әсәләр менән өйҙә үткән теманы нығытып ҡуяр өсөн бик отошло.

**Уйын «Парын тап»**

**Максат:**Күҙәтеүсәнлекте, иғтибарҙы, һәр предметҡа мәғәнә буйынса тап килгән парлы һүрәт һайлап алыу һәләтен үҫтереү.

Планшетта башҡорт халҡының йәшәү урыны, башҡорт халыҡ кейемдәре, музыкаль ҡорамалдар, башҡорт орнаменты менән танышыу һәм нығытыу.

Баланы Планшет методик ҡулланмаһы аша башҡорт теленә өйрәтеү, үҙ телен үҙләштереү генә түгел, ә уның матурлығын тойомлау, үҙ халҡының мәҙәниәте менән танышыу, ғорурлыҡ тойғоһо уятыу.

